Ике ҡыҙ һәм бер себеш.

(Г.Мостафина хикәйәһенән)

Өй. Музыка. Бер ҡыҙ йоҡлап ята. Әсәй кеше нимәлер эшләп йөрөй. Күршеләренең тауышын ишетә.

-Күршеләр, күршеләр, һөйөнөсөм менән уртаҡлашайым әле. Алмагөлөм бәпес тапҡан бит, ҡыҙ тапҡан! Өләсәй булдым.

-Эй, ҡайһылай ҙа һәйбәт булған.

-Хушығыҙ! Мин бүтән күршеләргә лә шатлығым менән уртаҡлашырға остом!ә

-Әйҙә, һине оҙатып ҡуяйым.

Икәүләп сығып китәләр.

Ҡыҙ тороп ултыра.

-Бәпәй тапҡан тиме?  бәпәйҙе ҡайҙан алалар икән һуң?

Икенсе бүлмәнән әсәһенең тауышы ишетелә.

-Ҡыҙым, тор инде. Мин эшкә киттем.

(Ишек асылып ябылған тауыш)

Ҡыҙ тороп ултыра.

-Уф. Хәҙер Ансар ағайым тағы ла йылға алып китәр инде. Бынау эçелә һис кенә лә уның артынан эйәреп йөрөгө килмәй бит әле. Һыу инергә барыбер рөхсәт юҡ. Йыраҡҡа китергә ярамай, улай ҙа итмә, былай ҙа итмә. Әллә йәшенеп ҡалырға инде.

(Тороп тәҙрәнән ҡарай)

Анаа, ағайым быҙауҙар ҡыуып ҡайтып килә. Ҡайҙа ғына йәшенергә икән.

(Музыка, йәшенергә урын эҙләй. Ҡыҙ карауат артында)

Ишек асылып ябыла. Ағаһы килеп инә.

-Фәнүрә, уяндыңмы? Әйҙә ҡапҡылап ал да һыу буйына киттек. Фәнүрә, Фәнүрә тейем.( Карауат артындағы һеңлеһен күреп ҡала) Унда нимә ҡарайһың? Уйнарға бүтән урын бөткәнме һиңә?

(Һеңлеһе килеп сыға)

-Бармайыҡ, ағай, әйҙә бөгөн бер ҡайҙа ла йөрөмәйек.

-Нисек инде балыҡҡа бармай ғына өйҙә ултырырға? Әйҙә инде. Тау итәгендә еләк бешкән. Мин балыҡ ҡармаҡлағансы һин еләк ашарһың.

-Әйҙә һуң!

(Сығып китәләр. Музыка. Карауатты сығарып, урман эшләйҙәр)

Музыка. Ҡыҙ еләк йыйып йөрөй.

-Эх,ҡайһылай тәмлекәй! Телеңде йотолоҡ. Әсәйем тәмле бәлеш бешерер әле. О, анауында тағын ике апай еләк йыйып йөрөй.

Шулай еләк йыйып йөрөгәндә бер баланы күреп ҡала.

-Ыста, әллә бала инде. Ысынлап та. Кемдеке икән? Сәйҙә инйекм Алмагөл бәпес тапҡан тей ине, әллә мин дә бәпес таптыммы икән? Уятайым әле

(иплэп кенә бәпесте уята)

Уянып китә лә Илап ебәрә.

-Әсәәәәй. Әсәәәй.

-Миңә әсәй тинеңме? Исемең кем? Һиңә нисә йәш?

-Илүзә.

-Әйҙә, Илүзә, ҡатайыҡ. Ҡайһылай һәйбәт булды. Мин үҙемә ҡыҙ таптым. Һин минең менән уйнарһың.

Сығалар.

-Атайым менән әсәйем һаман да ҡайтмағандар, ярай, Илүзә, икәүләп урамда ғына уйнап торайыҡ, йәме.

-Матул...

-Матурҡайҙармы? Һиңә берәүһен әпирәйемме?

-Эһе.

-Әсәйем һиҙмәҫ әле, эвет, барыбер күп тә һаң.

-Матул. (Муйынынан тороп, тауыҡ һыуына һелтәй)

-Әйҙә, Илүзә йыуындырайыҡ. Ана ҡалай бысыранып бөткәндәр. Бар һабын алып кил әле.

(Себештәрҙе йыуындыралар, күңелле музыка, әсәһе менән атаһы ҡайтып инә, аптырап торалар)

-Атаҡ, атаҡ, нимә эшләүең был?

-Әсәй, ҡаттыңмы ни? Ә мин себештәрҙе йыуындырам. Ана ҡайһылай рәхәтләнешеп яталар...

-Ай, аллам, ай ҡыҙым, үлтерҙең инде, үлтерҙең.

-Ҡыҙым, эшкингәнһең бит! –(атаһы көлә)

(Музыка, себештәрҙе һөртөндөрәләр)

-Был кем ҡыҙы? (атаһы әсәһенә ҡарай)

-Ҡыҙым, беҙгә әллә берәйһе килдеме?

-Юҡ, әсәй.

-Ә был улайһа кемдең ҡыҙы?

-Минеке. Алмагөл апайым кеүек мин дә урмандан бәпәй табып алдым.

-Туҡта, ҡыҙым, нисек була инде улай? – ти атаһы.

-Еләк йыйып йөрөй инем табып алдым. Мине лә һыуҙан тотоп алғанһығыҙ бит, үҙегеҙ әйттегеҙ.

Әсәһе:

-Бер минут та үҙеңде яңғыҙ ҡалдырырға ярамай, әбизәтелнә эш боҙаһың. Ни эшләтергә һине, ә?

-Илүзәне ауыл Советына алып барабыҙ инде. Әсәһе юғалтҡандыр.

-Ул минең ҡыҙым, Бер кемгә лә бирмәгеҙ, ул минең ҡыҙым...- илай-илай арттарынан эйәреп сығып китә.